Тема: Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Маҡсат: Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыуға ирешеү.

Бурыстар: 1. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлатыуға ирешеү, археология фәне буйынса төшөнсә биреү.

2. Күнегеүҙәр эшләү ярҙамында уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү.

3. Бай тарихлы Башҡортостанға һөйөү тойғоһон тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: эпиграф, һүҙлек эше.

Дәрес планы:

I. Ойоштороу мәле.

II. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

1) Өй эшен тикшереү.

III. Яңы теманы үҙләштереү.

1) Эпиграф уҡыу.

2) Һүҙлек диктанты.

3) Һүҙҙәрҙән һөйләм төҙөтөү.

4)Таҡталаға һөйләмдәрҙе тикшереү.

5) Ҡағыҙә уҡыу.

6) 231-се күнегеү.

IV. Дәресте йомғаҡлау.

V. Уҡыусыларҙың яуабын баһалау.

VI. Өй эше.

I. Ойоштороу мәле.

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!

II. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

- Уҡыусылар, үткән дәрестә һеҙҙең менән ниндәй тема менән танышып үттек?
- Нимә ул ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр?

1) Өй эшен тикшереү.

- Һеҙгә өй эшенә 226-сы күнегеү бирелгән ине. Әйҙәгеҙ тикшереп үтәйек.

III. Яңы теманы үҙләштереү:

1) Эпиграф уҡыу;

- Уҡыусылар, М. Горький “Сәнғәттең һүҙ башы - фольклорҙа” тигән. Ошо һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?

(Яҙма әҙәбиәт барлыҡҡа килмәгәнгә тиклем, иң алда ауыҙ-тел ижады булған. Халыҡ ижады булмаһа, беҙҙең сәнғәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ үҫешмәгән булыр ине.)

- Тимәк, уҡыусылар, бөгөн дәрестә беҙ нимә хаҡында һөйләшәсәкбеҙ?
- Дәрестең темаһы: Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре һәм фольклор, археология тураһында һүҙ алып барасаҡбыҙ. Шулай итеп, беҙҙең дәрестең маҡсаты: Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләренең ҡуйылышын аңлауға ирешеү; фольклорға ҡараған легендалар менән танышыу.

2) Һүҙлек диктанты;

- Ә хәҙер, уҡыусылар, бәләкәй генә һүҙлек диктанты эшләп алайыҡ.

Инсебикә ҡаяһы, Шүлгәнташ мәмерйәһе, Йылҡысыҡҡан күле, Бабсаҡ бей ҡәбере, Мәсем тауҙары, Мөжәүир хәҙрәт ҡәберлеге, Мораҙым мәмерйәһе.

-Ниндәй исемдәр мин һеҙгә яҙҙыртым? (яңғыҙлыҡ исемдәр).

- Тикшереп үтәйек!

- Барыһына ла ошо исемдәр танышмы? Ниндәй легендаларын ишеткәнегеҙ бар? (үҙем һөйләйем)

3) Һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөтөү;

- Ошо һүҙҙәрҙән һеҙгә ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр төҙөргә кәрәк булыр.

- Әйҙәгеҙ уҡып тикшереп үтәйек.

4) Такталаға һөйләмдәрҙе тикшереү;

1. Асыу килһә, аҡыл китер; аҡылың күп булһа, асыу бөтөр.

2. Көрәш – йәшәү шарты: көрәш бөткәндә, тормош һүнә.

- Ошо һөйләмдәрҙе күсереп яҙығыҙ, ике кеше таҡтаға сығып, һөйләмдәрҙе тикшерә. Тыныш билдәләренә иғтибар итегеҙ, ҡуйылышын аңлатып ҡарайыҡ.

- Тимәк, уҡыусылар, ҡатнаш ҡушма һөйләм эсендә алда килгән үҙ аллы һөйләмде бүтән һөйләмдәр асыҡлап килгәндә, ике нөктә ҡуйыла.

2. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәге эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр бер-береһенән нөктәле өтөр менән айырыла.

5) Ҡағиҙә уҡыу.

144-се биттә ҡағиҙә бирелгән, шуны уҡып сығайыҡ.

6) 231-се күнегеүҙе ҡарап үтәйек.

– Кем бирелешен уҡый?

- Ошо өҙөктә нимә тураһында һүҙ бара?
- Нимә ул археология? (Археология – фән, төрлө әйберҙәр аша йәмғиәттең тарихын өйрәнә.)
- Археология менән ныҡлап ҡыҙыҡһынған ғалим – Нияз Мәжитов. Ғафури районы Туғай ауылынан. Ул археология һәм этнография өлкәһендә эшләй. Әлеге ваҡытта ул БДУ-ла тарих фәндәре докторы. Ул Өфөнөң боронғо ҡаласыҡтарын да өйрәнеүсе ғалим.
- Өфө ҡаласыҡтары тураһында һеҙ нимәләр ишеткәнегеҙ бар? (һүрәт)

Өфө тирәһендә кешенең тәүге эҙҙәре бик боронғо быуатҡа (юғары палеолит) ҡарай. Уны тәү башлап 1961 йылда археолог-разведчик А.П. Шокуров Ҡыҙыл Яр ауылы эргәһендә бер ярым метр ҡалынлыҡтағы ер ҡатламы аҫтында таба. Табылдыҡтар бик ярлы – унда бары бер нисә ҡорал, эшләгәндә кителеп ҡалған саҡматаш киҫәктәре һәм ҡаҙылма хайуан һөйәктәре генә булған. Баҡыр быуат заманында инде Өфө тирәһендә кешеләр бик күп йәшәгән. Тимер быуаттың башында Өфө тирәһендә тәрән соҡорҙар һәм бейек яр ҡоймалар менән нығытылған тәүге ҡаласыҡтар барлыҡҡа килә.

- Ә “Бабсаҡ менән Күсәк” тигән легенданы ишеткәнегеҙ бармы?
- Нимә тураһында ул?
- Берегеҙ ҙә ишеткән булмағас, барығыҙ ҙа иғтибар менән тыңлағыҙ, мин һеҙгә эстәлеген һөйләйем. (“Бабсаҡ менән Күсәк” легендаһын һөйләү) (Мәсем хан, 4 батыр: Түңгәүер ырыуы – Тимерҡотло, Тамъян ырыуы – Тамъян, Ҡыпсаҡ ырыуы – Бабсаҡ, Бөрйән ырыуы - Ҡарағөлөмбәт)
- Күнегеүҙән ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙе табып күсерергә һәм синтаксик анализ эшләп, схемаһын төҙөргә кәрәк.

IV. Дәресте йомғаҡлау.

- Беҙ ниндәй тема менән танышып үттек?

- Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре ҡуйылышын аңлатығыҙ!

- Нимә ул археология? Ниндәй археолог менән таныштыҡ?

V. Уҡыусыларҙың яуабын баһалау.

- Афариндар! Барығыҙ ҙа актив булдығыҙ!

VI. Өй эше.

Үҙегеҙҙең яҡтағы ер-һыу атамалары тураһында легенда яҙып килергә!